*Лилиә ДӘҮЛӘТШИНА,*
*кадрҙар бүлегенең тәрбиә эше буйынса инспекторы, эске эштәр хеҙмәте өлкән лейтенанты*



# Күңел йылыһын өләшеп

Бына бер нисә йыл Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институтында яҡшы бер традиция йәшәп килә – бер нисә дөйөм белем биреү мәктәбендә, шулай уҡ Өфө ҡалаһының Киров районында бәлиғ булмаған үсмерҙәр араһында хоҡуҡ боҙоуҙы иҫкәртеү бүлегендә (ОППН) иҫәптә торған үсмерҙәргә шефлыҡ эше алып барыла. Был йәһәттән шефлыҡ иткән мәктәптәрҙең педагогик коллективтарына, уҡыусыларға хоҡуҡ тәрбиәһе биреүҙә, йәштәргә профессиональ йүнәлеш һайлауҙа, төрлө мәҙәни-масса саралары әҙерләүҙә һәм үткәреүҙә, түңәрәк эштәрен ойоштороуҙа һәм башҡа бик күп эштәрҙә ярҙам күрһәтелә. Шуны әйтергә кәрәк, бөтә был эштәр курсанттарҙың һәм уҡыусыларҙың буш ваҡытында үткәрелә. Бында уҡыусыларҙың дәрестән тыш эшмәкәрлеге мәсьәләләренә туҡталып үтергә кәрәк. Минеңсә, беҙҙең йәмғиәттә был эшкә тейешле баһа биреп еткерелмәй. Дәрестәрҙән һуң эш алып бармаған мәктәп балаларға дөрөҫ әхлаҡи тәрбиә бирә алмай. Балалар хеҙмәттә тәрбиәләнә. Был хеҙмәттең ниндәй булыуы мөһим түгел, иң элек ул балаларҙа ыңғай әхлаҡи һыҙаттар, ғәҙәттәр, сифаттар тәрбиәләүгә булышлыҡ итергә тейеш.

«Заря» йәйге хәрби-спорт лагерҙарын ойоштороу ауыр холоҡло үсмерҙәр менән шефлыҡ эшенең бер йүнәлеше иҫәпләнә. Әлеге көндә, дөрөҫөн әйткәндә, Өфөлә генә дүрт меңдән ашыу үсмер хоҡуҡ боҙоуҙы иҫкәртеү бүлегендә иҫәптә тора. Был үсмерҙәрҙең күбеһенең ата-әсәһе юҡ, нисек булдыралар, шулай йәшәйҙәр. Өфө ҡалаһының Эске эштәр идаралығы һәм Өфө юридик институты етәкселәре 1996—1997 йылдарҙа ауыр холоҡло үсмерҙәр өсөн

Ҡырмыҫҡалы районының Прибельский ҡасабаһында «Заря» хәрби-спорт уйындарын үткәрҙе. Лагерға барасаҡ балаларҙы һайлап алыуы ла еңелдән булманы: йөҙ кеше урынына биш йөҙ кеше барырға теләк белдерҙе. Шулай ҙа хәл итеү юлы табылды – Өфөнөң һәр районынан ун малай, ә ҡалғандар Ҡырмыҫҡалы районынан тупланды. Лагерҙа үҫмерҙәр ваҡ калибрлы ҡоралдарҙан атырға өйрәнде, сафта йөрөү күнекмәләренә эйә булды, физик әҙерлек алды. Төрлө спорт ярыштары үткәрелде, художестволы үҙешмәкәрлек оҫталары сығыш яһаны. Институт хеҙмәткәрҙәре һәм курсанттары үҫмерҙәргә хәрби шарттарҙа кәрәкле мөһим тормош күнекмәләренә эйә булырға ярҙам итте, хоҡуҡи темаларға төрлө әңгәмәләр үткәрҙе. Яҙмыштары ҡатмарлы булған балалар өсөн был көндәр сынығыу мәктәбенә әүерелде. Әйткәндәй, ял итеп ҡайтҡан үҫмерҙәр киләһе йылда һис кенә лә тәртип боҙманы. Шуға күрә «Заря» кеүек лагерҙарҙы балаларҙы йәмһеҙ тормош тырнағынан тартып алыу, тормошта бик күп ҡыҙыҡлы һәм яҡшы нәмәләр барлығын, кешеләр араһында үҙ-ара мөнәсәбәттең изгелек һәм игелеккә нигеҙләнеүен күрһәтеү сараһы тип ҡарарға мөмкин. Беренсе һәм икенсе курс курстанттары Өфө ҡалаһының Киров районындағы художество мәктәп-интернатына, 15, 6, 9, 18, 22-се дөйөм белем биреү мәктәптәре уҡыусыларына шефлыҡ ярҙамы күрһәтә, был эш мәктәп етәкселәре менән берлектә әҙерләнгән план буйынса тормошҡа ашырыла. Мәҫәлән, Ватанды һаҡлаусылар көнөн билдәләгәндә институтта курсанттар шефлыҡ иткән мәктәптәрҙән биш команда араһында хәрби-спорт уйындары үткәрелде, командаларҙы уйындарға шефтар әҙерләште. Уйын ваҡытында тантаналы рәүештә сафҡа теҙелеп, Советтар Союзы Геройы Александр Матросов бюсы эргәһенә сәскәләр гөлләмәһе һалынды. Уҡыусылар алдында институт начальнигы Константин Борисович Толкачев сығыш яһаны. Артабан хәрби эстафета, ваҡ калибрлы винтовканан атыу, арҡан тартышыу буйынса ярыштар, Башҡортостан Республикаһы Эске эштәр министрлығының Махсус тәғәйенләнешле милиция отрядының (ОМОН) күргәҙмә сығыштары, Эске эштәр министрлығы ҡарамағында булған ҡоралдар һәм махсус саралар күргәҙмәһе үтте. Үҫмерҙәр ялан шарттарында бешкән ашты һалдат котелоктарынан ауыҙ итте. Уйындарҙа 9-сы урта мәктәп командаһы еңеп сыҡты.

Инвалид балалар йәшәгән 13-сө республика интернат-мәктәбенә беҙҙең институт 1991 йылдан алып шефлыҡ итә. Рәсәйҙә хәйриә ярҙамы күрһәтеү һәр саҡ баһаланған, ә бөгөн ул айырыуса мөһим, сөнки күп кенә белем биреү учреждениелары финанс ҡыйынлыҡтары кисерә. Ә физик яҡтан камил булмаған балалар уҡыған мәктәптәр – икеләтә. Беҙ йыл һайын бында концерттар менән сығыш яһайбыҙ, телевидеоаппаратура, компьютер техникаһы, китаптар һ.б. бүләк иттек. 1998 йылда «Башҡортостан» Дәүләт телерадиокомпанияһы үткәргән телемарафон ваҡытында институт хеҙмәткәрҙәре һәм курсанттары 22 мең һум аҡса йыйҙы һәм уның 10 мең һумы хәйриә марафоны фондына күсерелде, 12 мең һумы 13-сө интернат-мәктәптең инвалид балаларына бирелде. Интернат-



«Заря» хәрби-спорт уйындары

мәктәпкә шефлыҡ итеү курсанттарҙың үҙҙәре өсөн дә тәрбиәүи әһәмиәткә эйә. «Беҙ башҡаларҙың ҡайғыһына вайымһыҙ кешеләрҙе түгел, ә ауыр саҡта беренсе булып ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған шәхестәр әҙерләйбеҙ. Һәм беҙҙең тәрбиәләнеүселәр ошо сифатты иң элек ошонда, интернат-мәктәптә ала», – тигәйне бер әңгәмә ваҡытында Өфө юридик институтының начальнигы К. Б. Толкачев.

Бынан тыш институт Ҡыҙыл Тәре һәм Ҡыҙыл Ярым Ай йәмғиәтенең республика комитетына ла (РК ОКК и КП) ҙур ярҙам күрһәтә. Курсанттар гуманитар йөк тейәлгән вагондарҙы бушата йәки тейәй, Бөтә Рәсәй инвалидтар йәмғиәтенең Башҡортостан ойошмаһы үткәргән сараларҙы ойоштороуҙа ла әүҙем ҡатнаша, граждандарға донор булараҡ та ярҙам ҡулы һуҙа.

Ҡыҫҡаһы, институт хеҙмәткәрҙәре һәм курсанттары шефлыҡ эшендә, төрлө хәйриә сараларында ҡатнашып, үҙҙәренең күңел йылыһын өләшә.

Үҙ-ара бер-береңә ярҙам ҡулы һуҙыу айырыуса мөһим булған әлеге заманда бөтә был сараларҙы беҙ эске эштәр органдарының буласаҡ хеҙмәткәрҙәрен тәрбиәләүҙең мөһим йүнәлеше тип иҫәпләйбеҙ.